# Бармаҡтар менән уйындар



Бармаҡтар өсөн күңелле ял минуттары бармаҡтарҙың атамаларын иҫтә ҡалдырырға, уларҙы танып белергә өйрәтеү менән бер рәттән ҡулдарҙың ваҡ моторикаһын һәм хәрәкәт азатлығын үҫтерергә лә ярҙам итә.

*Баланың усы буйлап бармаҡты түңәрәтеп йөрөтөп һамаҡларға:*

Бутыр-бутыр бутҡа бешкән,
Уның эсенә сыҫҡан төшкән,
Алайым тигәнсә 5 бармағы бешкән
(бармаҡтарҙы тотоп-тотоп)
Быныһы - баш бармаҡ, быныһы һуҡ (күрһәткес) бармаҡ, быныһы урта бармаҡ, быныһы атһыҙ (исемһеҙ)бармаҡ, быныһы сәтәкәй бармаҡ
Шул һүҙҙәрҙән һуң "Бына китте сыҫҡан, бына китте сыҫҡан" тип баланы ҡытыҡларға

Мин баш бармаҡ, баш бармаҡ,
Һәр эште мин башлайым.
Өй эсен дә тиҙ генә
Йыйыштырып ташлайым.

Сығанаҡ тип аталам,
Сығып китәм туғайға.
Сығып түгел, осоп китәм,
Атланып буҙ турғайға.

Урта бармаҡ мин үҙем,
Һәр эштә лә мин түҙем.
Сүп утайым, һыу һибәм,
Керҙәрем, ана, кибә.

Мин һуҡ бармаҡ, һуҡ бармаҡ,
Һуҡ тигәнгә һуҡмайым.
Кескәйҙәрҙе илатҡанды
Туҡмарға ла ҡурҡмайым

Минең исем сәтәкәй,
Үҙем бигерәк бәләкәй.
Ҡаймаҡ ялап, һөт эсәм,
Ҡасан инде ҙур үҫәм.

Биш бармағым уң ҡулда,
Биш бармағым һул ҡулда.
Бармаҡтарым ярҙам итер
Һанды оторға шунда.

Уң ҡулда ла биш бармаҡ,
Һул ҡулда ла биш бармаҡ.
Ике ҡулды бергә ҡуйһаң,
Булыр һиңә ун бармаҡ.

Бармаҡтарым арыны,
Хәҙер уйнап алырбыҙ.
Һәр бармаҡты бейетергә
Беҙ таҡмаҡтар табырбыҙ.

Баш бармаҡ бөрлөгән йыя,
Сығанаҡ бармаҡ салбар кейә,
Урта бармаҡ утын өйә,
Һуҡ бармаҡ һарыҡ ҡарай,
Сәтәкәй бармаҡ сәсен тарай.

Биш бармағым – биш туған,
Һәр ҡайһыһы бик уңған:
Иҙән йыуа, керҙәр элә,
Он иләй, икмәк теләә,
Һәр эштең яйын белә.
Дәфтәргә хәреф теҙә,
Баҡсала үлән өҙә,
Энә тотоп сәскә сигә,
Матур итеп күлдәк тегә…

Уф, бармаҡтарым арыны,
Сүплəп алам тарыны.
Бер тары, ике тары –
Һәр бөртөгө һап-һары.
Һары тары, ап-аҡ һөт,
Майлы бутҡаң, ашап бөт